*Роза МОРАТОВА*

## ИШТУҒАН МЕНӘН ХУШЛАШЫУ

*Сит өлкәләргә күсеү буйынса*
*башҡорттар башҡа милләт вәкилдәре*
*араһында беренсе урында тора.*
**(Статистик мәғлүмәттәрҙән)**

Хуш, Иштуған, ташлап китәм һине,
Ташлап китәм, ҡоштар шикелле.
Ҡоштар ҡайтыр яҙын, ҡайтыуҙарым,
Ҡайтыуҙарым минең икеле.
Китмәҫ инең, һуңғы өмөт кеүек
Емерелергә тора йорт-ҡура.
Тик шулай ҙа илдән айырылғансы
Ер һыуымды, уйым, бер ура.
Тауҙар миңә ҡырыҫ ҡына әйтте:
— Ниәтләгәс инде, китерһең.
Сит ерҙәрҙә, үҙәгеңде өҙөп,
Иҫтәреңә төшһәк, нишләрһең?
Ҡарауыл-тау әйтте: «Төштәреңдә
Еләктәрем өҙөп ҡабырһың.
Тәнең генә түгел, йәнең һыҙлар,
Дауаларын ҡайҙан табырһың?»
Ағиҙелем әйтте: «Ҡайҙа? Китмә! —
Һин һағынып миңә ҡайтырһың,
Һағыш баҫам тиеп, һыу ортларһың,
Һыу ортларһың, уттар йоторһоң.
Яҡлау эҙләп урмандарға бағам,
Ҡоро ғына әйтте бер имән:
«Илһеҙ кеше — меҫкен ҡамғаҡ инде,
Эй, күрәһеләрең бар икән».
Тән семерҙәп китте: «ҡамғаҡ»,тиеп,
Имән әллә миңә әйтәме.
Миңә әйтмәй, ауыр ваҡыттарҙа
Ирҙәр илен ташлап китәме?
Юҡҡа йырлағанмы олатайҙар:
«Тыуған ғына ерҙән кем туйған».
Алтын менән көмөш яуған ергә
Алмаштырмам һине, Иштуған,
Алмаштырмам һине, Иштуған.

## ИРТӘ КӨҘҘӨҢ ШУНДАЙ КӨНДӘРЕ БАР

Иртә көҙҙөң шундай көндәре бар,
Һауаларҙа яҙғы зәңгәрлек.
Тау битендә йәш үләндәр ҡалҡа,
Көс-дәртенә иҫең китерлек.
Баш осонда ҡаҙҙар ҡаңғылдаша,
Иҫәнләшеү түгел, хушлашыу.
Бары хәсрәткәме яҙҙа түгел,
Көҙҙәр еткәс кенә осрашыу.
Һағыныу түгел, аунап илаһам да
Үткән яҙҙар ҡайтмай — мин беләм.
Мөхәббәтем һиңә, көҙҙәр еткәс,
Ерҙе тишеп сыҡҡан йәш үлән.

## ИҪ КИТМӘҪТӘЙ ИНЕ МӨҒЖИЗӘГӘ

Иҫ китмәҫтәй ине мөғжизәгә
Аһ-зарҙарға тулған заманда.
Тәүләп күрҙем йүкә сәскәләрен
Хыял кеүек матур аҡланда.
Кескәй йондоҙ кеүек ут-сәскәләр,
Үҙҙәренән һығылып бал тама.
Сәскәләрҙән һығылып бал тамғанда
Күҙәремә әсә йәш тула.
Һин дә йондоҙ, уй ҙа, буй ҙа етмәҫ
Яҙмышымда һыңлап табылған:
Йондоҙҙар бит йылытырға түгел,
Һоҡланһындар өсөн ҡабынған.

## УЙЛА, ХАЛҠЫМ

Һуңғы өмөт менән күккә бағам,
Ерҙә, ахры, ундай көс юҡтыр.
Әй, Илаһым, һиңә бер теләгем,
Башҡортомдо, зинһар, айныҡтыр.
Милләтемдең бөгөнгөһөн күреп,
Ата-баба рухы ни тиер?!
«Батшаларға баш эймәгән башҡорт»
Араҡыға микән баш эйер?!
Ҡарт-ҡоролар пенсияһын әсә
Аҡыл бирер саҡта йәштәргә.
Ата-әсә әсә ҡарамайса
Сабый күҙендәге йәштәргә.
Эш юҡтанмы, маҡсат юҡлыҡтанмы
Йәштәр әсә, баш һәм күҙ ярып,
Ах, араҡы, күпме һөйөүҙәргә,
Яҙмыштарға төшә ыу булып.
Ятып ҡалырмы ни буш шешәләр
Ҡәберендә һуңғы башҡорттоң?
Араҡы бит — нәҫел ҡоротоусы,
Ахры, халҡым, шуны оноттоң.
Юғалырмы башҡорт Ер йөҙөнән
Өҙөлөп йыры, ярылып ҡурайы.
Һәм тыумаҫмы уның Зәкиҙәре,
Рәмиҙәре, Заһир, Мостайы?
Шатланышып исемең теркәрҙәрме
Ҡара ҡулдар «Ҡара китап»ҡа.
Һуң түгел бит әле айнығырға,
Уйла, халҡым, уйла шул хаҡта.

## РӘНЙЕМӘЙЕМ, ТӘҢРЕМ...

Хаҡ Тәғәлә беҙҙе шат сағында
Бер-беребеҙ өсөн яратҡан.
Бәхетегеҙгә кеше көнләшер, тип,
Яҙмышыбыҙ ебен сейәлткән.
Осраштырған йылдар, юлдар үткәс,
Араларға ятҡас яҙмыштар.
«Бер боҙҙарға, бер ҡуҙҙарға һалыр
Ерҙә Һөйөү тигән бер көс бар».
Уйланымы шулай, әллә инде
Теләнеме һынап ҡарайһы:
«Был хәсрәттән бәйғәмбәрҙәр бөгөлә,
Нишләр икән әҙәм балаһы?!
Түҙәм инде, түккән йәштәремде
Ай күтәрә, ҡаплай томандар.
Рәнйемәйем, Тәңрем, йөрәгемдә
Көс биреүсе шишмәм — һөйөү бар.



*Гөлназ ҠОТОЕВА*

## ОҘАТТЫМ ҠОШТАР СЫҢЫН...

Ни тиклем дә кәрәк икән миңә
Һинең иғтибарың,
Ҡараш,
ымың...
Һинһеҙ генә бөгөн оҙаттым мин
Йылы яҡҡа китер ҡоштар тубын.
Ҡабат күрмәм,
Күрешеүҙәр юҡ, тип,
Мин оҙаттым иртән ҡоштар сыңын.
Был донъяға һөйөп бағыр өсөн,
Их,
Ни тиклем дә кәрәк ҡараш,
ымың...

## БАЛҠЫШ

Сәскәһе лә,
Анау сәскәһе лә
Балҡып ҡарата бит.
Япраҡты ла,
Анау япраҡты ла
Елдәр ярата бит.
Кешегә лә Тәбиғәт көс биргән
Һөйөп, һөйөлөргә.
Япраҡ кеүек,
Анау япраҡ кеүек
Елдән өҙөлөргә.
Ҡыуылырға яҙмыш елдәренән
Тәҡдир ҡушҡаныса...
Мәлем минең — мәңгелегем, тиеп,
Оса япраҡ,
Оса.

## ҺЕҘ ҠАЙҘА?

Ҡалҡыр инде Сулпан йондоҙ,
Ҡалҡыр инде Ай ҙа.
Ғәмһеҙ сағым,
Бала сағым,
Уйһыҙ сағым ҡайҙа?
Үтер инде бынау төнөм,
Шул илаһи мәлем.
Янып бөтөр шатлыҡтарым,
Иреп бөтөр шәмем.
Килеп баҫыр болоҡһоуҙар,
Өҙгөләнер мәлем.
Ғазабымдан таҙарынып,
Ҡабат балҡыр йәнем.
Тик туҡталмаҫ шул хәрәкәт,
Ҡайтмаҫ кире үткән.
Үткәндәрҙе ҡайтарам, тип,
Ҡабат йәш тә түкмәм.
Ҡалҡһын әйҙә Сулпан йондоҙ,
Ҡалҡһын әйҙә Ай ҙа.
Балҡыр көнөм,
Шатлыҡтарым,
Килегеҙ,
Һеҙ ҡайҙа?

## БАЛАМА

Шундай оҙаҡ көттөм һине, балам,
Юҡһыныуым диңгеҙ хәтлем булды.
Ерҙән,
Күктән,
Һыуҙан
Көттөм һине,
Һөйөү булып тамыр ҡыҙ йә улды...

Шундай оҙаҡ көтәм һине, балам,
Күкрәккәйем тулы ғәм һәм хәстәр.
Ерҙән,
Күктән,
Һыуҙан
Алам нурҙы.
Наҙ көлтәһе үҙем бына хәс тә.

Шундай оҙаҡ көтәм шул ауазды,
Был үҙе бер түгелеүгә һыуһау.
Был яратыу,
                    тағы ратылыу,
Һинең мөхәббәтең менән һулау.

## ЯҘ ТЕЛӘҮ

Еңелмәүҙән түгел,
Инәлмәүҙән
Үҙ-үҙемде шулай үртәр сағым.
Ҡан ҡыҙҙырған тәкәбберлек тәһәң,
Кәзәмөгөҙ йондоҙлоғом тағын...
Еңелмәүҙән түгел,
Инәлмәүҙән
Ишектәрем ябылып ҡалды шартлап.
Йүгерер юлды бына йүгермәйем,
Киләм һуҙа баҫып, яйлап атлап.
Йән яҙ теләй,
Йәнгә наҙ килешә!
Һиңә табан ҡалай һоноламын.
Һин — алдатҡыс ҡапҡан.
Үҙем тапҡан.
Ғазаптарҙан йәнә йомоламын.
Аяҙырмы күгем?
Минең сүгем...
Ҡояшҡынам,
Хатта төшлөктә лә
Ҡалай һалҡын ғына тойолаһың...

## ҺИҘҘЕҢ МИКӘН?

Мин артыңдан ҡарап ҡалдым,
Һиҙҙең микән?
Ут ҡапҡандай янып китте
Ике сикәм.

Йөрәгемде ташламаны
Шул ут, шул ут.
Тик ҡаршыңа алып сығыр
Юл юҡ, юл юҡ...